«Һин булғанға – мин бәхетле» кластан тыш сара

1.Хәйерле көн,хөрмәтле ҡунаҡтар. Бөгөн беҙҙең М.Буранғолов исемендәге башҡорт лицейында оло йыйын. Башланғыс кластарҙа балаларҙы уҡытыу,тәрбиәләү проблемалары тикшерелә.Беҙҙең һөйөклө уҡытыусыларыбыҙ үҙ тәжрибәләре менән уртаҡлаша.

2. «Эш бөткәс, уйнарға ярай»- ти халыҡ мәҡәле. Еребеҙҙе, лицейыбыҙҙы, халҡыбыҙҙы данлаусы «Һин булғанға – мин бәхетле» кисәһенә рәхим итегеҙ.

ЙЫР « Ватаным»

3.Эйе, нимә ул тыуған ер, Ватан?

4.Ватан ул,ҡыҙым,Тыуған ил,
Бына беҙ торған урын
Был ерҙә ғүмер кисергән
Ата-бабайҙар борон.

5.Йырсылар торған был ерҙә,
Сәсәндәр булған элек.
Ватандың нимә икәнен
Әйткәндәр былай тиеп:

6.Эй Тыуған ил,Тыуған ил,
Тыуған ил ул – тыуған ер,
Атай – кейәү булған ер,
Әсәй – килен булған ер.

7.Кендегемде киҫкән ер,
Тәмле һыуын эскән ер,
Ирҙәрҙе ир иткән ер,
Яуызды хур иткән ер.

8.Батырға дан биргән ер,
Халҡына һан биргән ер,
Ана шул ер – Тыуған ил,
Ана шул ил – тыуған ер.

9.Эйе,тыуған ер миңә йәшәүгә көс,дәрт бирә.Башҡортостанда тыуғаныма ғорурланам. Үҙемә кәрәкле белем,һөнәр алып,уның матурлығын,байлығын арттырыу – минең,беҙҙең бурыс.

10.Ватаныбыҙ – Башҡортостан.Тыуған төйәгебеҙ – Әлшәй,Башҡор тостандың бер киҫәге.

11.Бормаланып аҡҡан гүзәл Дим, мәғрүр Сусаҡтау,киң билдәле – Чехов һәм Шафран шифаханалары, Һыуһылыу төйәге – Асылы күл, килен ташы – бына ниндәй Әлшәй ере.

« Әлшәйем» йыры

12.Әлшәй ере – меңдәр төйәге.Тамырҙары тәрәнгә төшөп һут ала, үҫә,нығына,йәшәй һәм йәшәйәсәк. Ә быйыл беҙ райондың 75 йыллыҡ юбилейын билдәләйбеҙ.

13.Ер шарында илдәр бик күп,
Араһында – һин бер бөртөк,
Башҡортостан – ғәзиз илем
ҡотло ла һин,һутлы ла һин,
Көс-дәрт бирер утлы ла һин,
Илкәйем дә – туған телем.

14.Райондың ғорурлығын,данын,байлығын арттырыуҙа Раевка 1-се һанлы мәктәбенең, (М.Буранғолов исемендәге башҡорт лицейының) өлөшө ҙур. Беҙҙең мәктәптә белем алған: район, колхоз, ойошма етәкселәре,уҡытыусылар,табиптар,тракторсылар, һауынсылар һәм башҡалар бик күп.

15.Дандарыңда һинең өлөш тә бар
Дан ҡаҙанған күпме батырҙы:
Тәүгеләрҙән – тәүге
Уларҙы һин
Тормош һуҡмағына баҫтырҙың.

16.Эшсән кеше булыу – бик ҙур бәхет,
Эш ул – был тормоштоң үҙәге.
Уҡый-яҙа белеү – шул тормоштоң
Гәүһәр төҫлө матур биҙәге.

17.Беҙҙең мәктәп уҡытыусылары ла Бөйөк Ватан һуғышында фашистар менән аяуһыҙ көрәшкәндәр.

Һуғыш ветерандары:

1.Хөсәйенов Нәбиулла Ғатаулла улы
(рәсем уҡытыусыһы )

2.Мөхәмәтов Ғәли Әмир улы
(18 йыл мәктәп директоры һәм химия уҡытыусыһы)

3.Юнысов Зәки Сәлих улы
(урыҫ теле уҡытыусыһы)

4.Игнатьева Анна Федоровна
(башланғыс класс уҡытыусыһы)

Йыр « Ҡайтманығыҙ тыуған яҡтарға»

18.Беҙ – башҡорт лицейының бөгөнгөһө,Ватаныбыҙҙың киләсәк эшсән ҡулдары.Беҙ – белемле,тәрбиәле,рухлы булһын өсөн уҡытыусыларыбыҙ тырышып эшләй.

19.Насар ғәҙәттәргә – наркоманияға,эскелеккә,тәмәке тартыуға ҡаршы көрәшеү һәм күңел сафлығы булдырыу өсөн янып йәшәйбеҙ.

20. Гүзәл Әлшәй яҡтарында
Бик һәйбәт бер лицей бар.
Беҙҙең башҡорт лицейы тип
Йөрөтә уны балалар.

21.Бөтәбеҙ ҙә яҡшы уҡый
Күп белергә тырыша
Барыһы ла шатлыҡ менән
Байрамдарҙа ҡатнаша.

22.Инглиз,немец,урыҫ,башҡорт

Телдәрен өйрәнәбеҙ
Алған белемдәребеҙҙе
Тормошта ҡулланабыҙ.

23.Башҡортостанда төрлө милләт халыҡтары дуҫ йәшәй. Беҙҙең мәктәптә генә 12 төрлө милләт балалары белем ала.

24.Кемдәр йәшәй беҙҙә?

25.Һорауға яуап бирәм.
Сөнки халҡымдың кемлеген
Мин беләм,яҡшы беләм.

26.Башҡорт йәшәй.

27.Татар йәшәй.

28.Сыуаш…

29.Урыҫ…

30.Уйҙары яҡты донъяға –
Килтереү бары ырыҫ.

Йыр «Наш край»

31.Исемдәр төрлө булһа ла,
Барыбыҙ ҙа бер туған.
Илебеҙҙе йәшәртергә,
Һөйөп-наҙлап йәшәтергә
Беҙ бит донъяға тыуған.

32.Туған тел төрлө булһа ла,
Уртаҡ тыуған илебеҙ,
Ҡояшлы Башҡортостанда
Бәхетле һәр беребеҙ.

33.Оран һалам башҡорт иленә:
Һатмаҫҡа тыуған ерҙәрҙе,

Бөтөрмәҫкә ҡош-ҡорттарҙы,
Бысратмаҫҡа шишмәләрҙе.

34.Оран һалам тыуған халҡыма:
Онотмаҫҡа туған телебеҙҙе,
Онотмаҫҡа ил тарихын,
Гәүһәребеҙ – нәҫел еребеҙҙе.

35.Оран һалам, башҡорттарым.
Хәстәрләйек көнөбөҙҙө.
Батыр Салауатыбыҙҙай
Һаҡлайыҡ ил-еребеҙҙе!

36.Һаҡлағыҙ башҡорт илен
Башҡорт илен – йыр илен
Йырҙар илен,моңдар илен
Башҡорт илен,йыр илен
Башҡорт илен.